# Башҡортостан тураһында шиғырҙар.

## БАШҠОРТОСТАН.

Башҡортостан – баш илем,
Йыһандағы бишегем.
Ҙур донъяға алып сығыр
Яҙмышымдың ишеге.

Тәпәй баҫкан тупрағым,
Тәгәрәп үҫкән ҡырҙарым,
Һыуһынымды ҡандырған
Тәмле–татлы һыуҙарым.

Башҡортостан – баш илем,
Һиндә асылды телем.
Һинең йылы ҡосағыңда
Шатланып алам белем.

Р. Ураҡсина

## ДУҪЛЫҠ ҺӘЙКӘЛЕ.

Күк Уралды,
Баш ҡаламды нурлап,
Күккә ашты мәрмәр монумент.
Ул – символы изге көрәштәрҙең,
Сал тарихтың һүнмәҫ даны бит.

Ағиҙелдең бейек яр башында
Һырғый һәйкәл күккә олғашҡан...
Бөйөк дуҫлыҡ, нығып быуат-быуат,
Йөрәктәргә килеп тоташҡан.

Ҡ. Аралбай

## ШҮЛГӘН.

Затлы һарайҙарың ары торһон
Һин барында, Шүлгән!
Бөйөк һының көҙгөләрҙән түгел,
Ҡарай төпһөҙ күлдән,
Үҙ күлеңдән, Шүлгән!

Дөрләгәндәр уттар мәмерйәлә,
Һалынған тамғалар.
Ҡалмаған көл, йәшәй рәссам йәне:
Тамғалар һаман бар,
Мәңгелек тамғалар!

Бик бородан килгән ул сәләмде
Белербеҙ беҙ ҡасан?..
Аңларбыҙ ҙа таң ҡалырбыҙ төҫлө,
Асылғандай асман.

Й. Ильясова

## БАШҠОРТОСТАН ФЛАГЫ.

Башҡортостан флагында
Күк, аҡ, йәшел төҫ уйнай.
Зәңгәр күктә талпына ул,
Аҫыл ҡош ҡанатылай.

Күк төҫ – изгелек билдәһе,
Аҡ төҫ – именлек, сафлыҡ.
Йәшел – йәшәү мәңгелеге,
Татыулыҡ һәм азатлыҡ.

Ҡурай сәскәһенең тажы
Дуҫлыҡты һынландыра.
Гел татыу йәшәгән халыҡ
Ерҙә ныҡ баҫып тора.

Республикамдың флагы
Елберләп саңҡығандай:
“Имен, шат, бәхетле булып
Йәшәгеҙ бер туғандай!”

Ә.Әсәҙуллина

## АЙ, УРАЛЫМ!

Ай, Уралым, Уралым,
Күгәреп ятҡан Уралым!
Нурға сумған тубәһе,

Күккә ашҡан Уралым!
Һине маҡтай йырҙарым,
Һине данлай йырҙарым.

Төнөн күккә ай ҡалҡһа,
Көмөштәй балҡый Уралтау,
Көндөҙ күккә көн ҡалҡһа,
Алтындай балҡый Уралтау

Биттәреңдә, Уралтау,_
Ҡамыштай ҡарағай урманың,
Итәгеңдә, Уралтау,
Балаҫтай болон-ҡырҙарың.

Күҙҙең яуын алалар
Аҡ, һары, ал сәскәләр.
Сәскәләр менән һандуғас
Тәңрегә тәсбих әйтәләр.

Ҡыҙарып ҡалҡҡан ҡояшты
Һайрап ҡаршылай ҡоштарың.
Тонйорап батҡан ҡояшты
Һайрап оҙата ҡоштарың.

Ай, Уралым, Уралым,
Һылыу ҙа һылыу Уралым!
Һүҙем бөтһә лә телемдә,
Йырым бөтмәне, Уралым!

Маҡтап ҡурай уйнаһам,
Бөтмәй ҙә торған көй булыр.
Данлап йырым йырлаһам,
Бөтмәй ҙә торған йыр булыр.

С. Юлаев

## САЛАУАТ БАТЫР.

Эй, Салауат, һай, Салауат!
Башҡортомдоң дан улы.

Азат булһын халҡым тиеп
Кискән ул ут, даръяны.

Уҡ-ҡылысы ғына түгел,
Ҡорал булған йыр-һүҙе.
Сәсән телле Салауатты
Күтәргән халҡым үҙе.

Егет кенә сағында уҡ
Булған илдең терәге.
Һөргөндә лә халҡым тиеп
Типкән уның йөрәге.

Н. Сәлимов

## ҠАЙЫН ЯПРАҒЫ ТУРАҺЫНДА

Ер шарының картаһына
Ҡараһаң яҡшы ғына, -
Башҡортостан шул картала
Бер япраҡ саҡлы ғына.
Эйе, япраҡ аҡ ҡайындың
Бер япрағы ни бары.
Ә ҡайыны – бөйөк Рәсәй –
Шундай йәшел, юғары.

...Картаға ҡарап, еремде:
- Бер япраҡ саҡлы, - тинем,
Мин хайранмын киңлегеңә,
Башҡортостаным - илем!
Бер сигең Яйыҡ ярында,
Ыҡ буйында бер сигең,
Бөркөт ҡанатын талдырыр
Сал тауҙарың бар һинең.
Һиндә тормоштоң көрлөгө,
Донъялар именлеге,
Һиндә тауҙар ғорурлығы,
Далалар иркенлеге.
Һыуҙарың көмөш.Тупрағың
Торғаны алтын һинең,

Бар хазинандан ҡиммәтле
Бәхетле халҡың һинең!

М. Кәрим

## МӘҢГЕ БАЛҠЫ, БАШҠОРТОСТАН.

Моңдарымдың моңо һиңә,
Башҡортостан - төйәгем һин.
Һиндә тыуып, һиндә үҫтем,
Берҙән-берем, йөрәгем һин.

Һулап туймаҫ - һауаларың,
Йомарт ерең - иҫ китмәле!
Байлығыңды һанар өсөн
Белеп торам һүҙ етмәҫен.

Баҫыуҙарың, диңгеҙ төҫлө,
Иҫкән елгә тулҡын һирпә.
Башын эйгән башаҡтарҙа
Бөртөк-бөртөк йәшәү тиртә.

Хазинаға, Башҡортостан,
Һәр тарафың һинең тулы.
Ҡабынғанһың уралымдың
Күкрәгендә йондоҙ булып.

Уйымда һин, ҡанымда һин,
Башҡортостан - ғәзиз әсәм.
Киң ватандан ҡеүәт алып,
Мәңге балҡы, мәңге йәшә!
Башҡортостан - ғәзиз әсәм.

Р. Йәнбәк

## БАШҠОРТОСТАН – ИЛГЕНӘМ

1. Сабый саҡтан күкрәгемә
Тамыр йәйгән гөлгенәм.
Һулыш биргән, тормош биргән
Әсәйемдәй бергенәм.

Ҡушымта:_

Башҡортостан – илгенәм,
Илгенәм, илгенәм,
Гөлдәр менән тиңгенәм.
Тамыр йәйгән гөлгенәм,
Гөлгенәм, гөлгенәм,
Башҡортостан – илгенәм.

2. Һулар һауам, йәнгә дауам,
Сыуаҡ, матур көнгенәм.
Күңелдәргә йәйғор һуҙған
Йор һәм сәсән телгенәм.
Ҡушымта:

3. Күп милләтле дәүләтем һин,
Тиңдәр менән тиңгенәм.
Ғүмер иткән, донъя көткән,
Йән ереккән ергенәм!
Ҡушымта:

А. Игебаев һүҙҙәре

ГИМН

Ул - дәүләттең бөйөк көйө,
Уртаҡ йыры халыҡтың.
Бар донъяға яңғырата
Тантанаһын халыҡтың.

Гимн кеүек йыры булған
Халҡымдың бик борондан.
“Урал” тиеп атала ул,
Илгә йырлай оло дан.

Башҡорт илен хәҙер данлай
Күркәм көйө – Гимны.
Һәр көн иртән радионан
Ишетәбеҙ гел уны.

Бар кешегә аңлашыла
Мәғ(ә)нәле Гимн теле:

Мәңге йәшә, ғәзиз халҡым,
Сәскә ат, башҡорт иле!

Н. Сәлимов

## ДУҪЛЫҠ ИЛЕНДӘ.

Бергә уҡыйбыҙ, уйнайбыҙ,
Уртаҡ тыуған илебеҙ,
Барыбыҙға ла ҡәҙерле
Беҙҙең ғәзиз еребеҙ.
Мин – башҡорт,
Мин – татар,
Мин – рус,
Мин – сыуаш,
Еребеҙҙә беҙ бәхетле
Дуҫлыҡ илендә тыуғас.
Байрамдар ҙа бергә үтә,
Йыр, шиғырҙар яңғырай,
Ҡурайсыбыҙҙы тыңлағыҙ –
Татыулыҡҡа дан йырлай.
Мин – башҡорт,
Мин – татар,
Мин – рус,
Мин – сыуаш,
Яуларбыҙ бейек үрҙәрҙе,
Беҙҙең теләк ауаздаш!

Ф. Ғөбәйҙуллина

## ЛАЙЫҠЛЫ АЛМАШ.

Башҡортостан, һин -
Тыуған ергенәм,
Минең һөйөклөм,
Минең бергенәм.

Матур - ҡыҙҙары,
Батыр - улдары,
Бары яҡшыға
Тотҡан юлдары.

Лайыҡлы булып
Үҫеп етербеҙ,
Ватаныбыҙға
Хеҙмәт итербеҙ!
Гүзәл Ситдиҡова

ЯНҒАНТАУҒА МӘҘХИӘ.

Хозур ерҙәр күптер был донъяла,
Тик Янғантау бер ул, бер генә,
Йәннәт ләззәттәрең ары торһон,
Йән дауаһы табыр был ерҙә.

Мең сырхауға шифа Ҡорғаҙағы
Һыуһындарҙы бермә ҡандырыр,
Һаташтырыр һары һандуғасы,
Ҡауыштырыр сихри таңдары.

Китһәң әгәр, иҫтәреңә төшөр
Дәрт уятыр янар ҡуҙҙары,
Аҙаштырыр әле ҡайындары,
Һаташтырыр әле ҡыҙҙары.

Етемһерәр йөрәк Янғантауһыҙ,
Йүрүҙәнден моңло йырыһыҙ,
Һаташтырыр әле ҡайындары,
Һағындырыр әле йылыһы...
Ҡ. Аралбай

- **XIX быуат**

Даими рәүештә хәрби хеҙмәттә булған башҡорт халҡының милли символы итеп иҫәпләнгән байраҡ тураһында тулы булмаған мәғлүмәт билдәле. Ул саҡтағы байраҡта ике башлы сәмреғош һәм уның тирәләй һибелгән алты мөйөшлө йондоҙҙар өҫтөндә Ҡөрьән аяты яҙылған булған.

- **1918 йыл**

Башҡортостан дәүләт флагы тарихы 1918 йылдың 20 август көнөнән башлана. Башҡорт хөкүмәте фарманы менән был көндә башҡорт милли флагы раҫлана. Башҡорт милли флагы төҙөлөшө буйынса 1918 йылға тиклем булған Рәсәй Дәүләт флагын ҡабатлай, төҫтәр айырмалығы менән үҙенсәлекле була. Башҡорт милли флагы зәңгәр, йәшел һәм аҡ төҫтәге өс

буй һыҙаттан тора. Флагтың өҫкө һыҙаты күк төҫтә булып башҡорттарҙың төрки халыҡтарға ҡарауын, урталағы йәшел төҫлө һыҙат — башҡорт халҡының ислам дине ҡанундарына буйһоноуын, аҫтағы аҡ буй төҫлө һыҙат — Башҡортостан халыҡтарының элек — электән тыныслыҡҡа, именлеккә һәм бәхеткә ынтылыуын аңлата.

- **1924 йыл**

Башҡорт Совет Автономияһы төҙөлөү сәбәпле, 1918 йылда Башҡорт хөкүмәте тарафынан ҡабул ителгән милли флаг ғәмәлдән сығарыла. Башҡортостандың Үҙәк башҡарма комитеты ҡарары менән 1924 йылдың 11 октябрендә Дәүләт флагы раҫлана. Дәүләт флагы итеп ҡыҙыл төҫтәге туҡыма алына, уның өҫкө мөйөшөндә, флаг һабы эргәһендә алтын ураҡ һәм сүкеш, улар аҫтында алтын ҡайма менән уратылған ҡыҙыл йондоҙ һүрәтләнә.

- **1938 йыл**

1938 йылдың февралендә Башҡорт АССР-ы Дәүләт флагына үҙгәреш индерелә. Уның өҫкө һул мөйөшөндә, флаг һабы эргәһендә «РСФСР» һәм бәләкәйерәк хәрефле «Башкирская АССР» яҙыуы индерелә.

- **1954 йыл**

РСФСР Дәүләт флагы үҙгәреү сәбәпле, Башҡорт АССР-ы Дәүләт флагы ла үҙгәртелә. Флаг һабы яны буйлап флагтың бөтә иңенә асыҡ зәңгәр төҫтәге һыҙат өҫтәлә. Шул килеш флаг 1990-сы йылдарға тиклем ҡулланыла.

- **1992 йыл**

Рәсәй һәм Башҡортостан дәүләтселеге яңыртылыуы сәбәпле, дәүләт символдары ла үҙгәрә. 1990 йылдың 11 октябрендә Юғары Совет тарафынан Башҡортостан Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһында Декларация ҡабул ителә. 1990 йылдың 26 ноябрендә Башҡортостан Республикаһының Министрҙар Кабинеты «Башҡортостан Республикаһының флагы, гербы һәм гимнына иң яҡшы проектҡа конкурс үткәреү тураһында» 211-се ҡарарын ҡабул итә. Конкурс комиссияһында ижади берләшмәләр, профессиональ рәссамдар, композиторҙар, уҡытыусылар, юғары уҡыу йорттары студенттары, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре тәҡдим иткән ҡырҡҡа яҡын дәүләт атрибуттары проекты ҡарала.

Башҡортостан Республикаһының Дәүләт флагы итеп рәссамдар Урал Мәсәлимов һәм Ольга Асабина тәҡдим иткән флаг һайлана, һәм Башҡортостан Республикаһының Юғары Советы 1992 йылдың 25 февралендә республиканың яңы Дәүләт флагын раҫлай.

## Һүрәтләү[үҙгәртергә | вики-тексты үҙгәртергә]

Дәүләт флагында зәңгәр, аҡ һәм йәшел төҫтәге горизонталь тигеҙ буйлы һыҙаттар, уртаһында һары түңәрәк эсендә һары төҫтәге ҡурай сәскәһе төшөрөлгән. Зәңгәр төҫ күк йөҙөн, ғәҙеллекте һәм уй-ниәттәренең сафлығын аңлата. Аҡ төҫ — республика халыҡтарының тыныслыҡты һәм татыулыҡты һөйөүен белдерә. Йәшел төҫ — азатлыҡ һәм тормоштоң мәңгелеген билдәләй. Ҡурай сәскәһе — дуҫлыҡ символы.

**Маҡсат: - Сифат темаһын һәм сифатҡа ҡарата һүҙҙәрҙе үҙләштереү.**
**- Ҡурай һәм мәшһүр ҡурайсылар тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт биреү.**
**- Фекерләү һәм бәйләнешле телмәр үҫтереү.**
**- Башҡорт теле дәресенә ҡарата һөйөү уятыу,Башҡортостанға,уның шәхестәренә ҡарата йылы ҡараш уятыу.**
**Йыһаҙландырыу: ҡурайсылар портреты, ТСО (ҡурай моңо булған диск)**
**Дәрес барышы**

Маҡсат: сифат тураһында дөйөм төшөнсә биреү, уның ниндәй һорауҙарға яуап булып килеүен аңлатыу, сифаттарҙың телмәрҙәге ролен билдәләү; уҡыусыларҙың диалогик телмәрен үҫтереү, фекерләү һәләтен арттырыу; Башҡортостанға, уның матурлығына һөйөү һәм ихтирам тойғоһо уятыу, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Йыһаҙландырыу: һүрәттәр, карточкалар, иллюстрациялар, фоноязма, компьютер. Дәрес барышы. I. Ойоштороу мәле. 1. Психологик комфорт булдырыу. Балалар бер-береһенә ҡарап йылмая, ҡул бирешеп сәләмләй. 2. Артикуляцион күнегеүҙәр. А) Сәләмләйем һауаны, Именлек булһын өсөн! Сәләмләйем Ер-әсәне, Беҙҙе туйҙырған өсөн! Сәләмләйем дуҫымды, Гел дуҫлыҡ булһын өсөн! Б) Дә-дә-дә - һөйләшәм башҡорт телендә Дә-дә-дә - яҙам башҡорт телендә. Ға-ға-ға – ҡаҙҙар китте йылғаға. - Гә-гә-гә - беҙ китәбеҙ Өфөгә. - Өфө тураһында нимәләр беләһегеҙ? - Унда ниндәй иҫтәлекле урындар бар? II. Өйгә эште тикшереү. 1. Һорауҙарға яуаптар биреү. (Дөрөҫ яуап биргән уҡыусы бер мәрәй ала). - Нимә ул исем? - Исем һүҙ төркөмө ниндәй һорауҙарға яуап була? - Яһалышы яғынан исемдәр ниндәй төрҙәргә бүленә?Миҫалдар килтерегеҙ. + тамыр, яһалма, ҡушма, парлы исемдәр. - Ниндәй исемдәр уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр тип атала? - Нимә ул эйәлек категорияһы? - Нимә ул хәбәрлек категорияһы? Миҫалдар килтерегеҙ. 2. Статистик парҙарҙа карточкалар менән эшләү - Исемдәрҙе килештәр менән үҙгәртеү. (Та7тала дөрөҫ яуаптар бирелә, уҡыусылар бер-береһенең эшен тикшерә, баһалай). III. Төп өлөш. 1. Маҡсатты әйтеү, теманы билдәләү өсөн кроссворд сисеү. 1 с ә ғ ә т 4 5 2 к и т а п 3 ф и л ҡ у р а й м ә к т ә п 1. Атлай ҙа, атлай Һаман барып етә алмай 2. Белем шишмәһе. 3. Кескәй генә күҙ. Бороно оҙон бигерәк, Уның исемен яҙыу өсөн Өс кенә хәреф кәрәк. 4. Үҙе үҫемлек, унан да моңло нәмә юҡ. 5. Белем усағы. - Ниндәй һүҙ килеп сыҡты? - Беҙҙең бөгөнгө дәрес “Сифаттар” темаһына бағышланасаҡ. 2. Сифат тураһында дөйөм төшөнсә биреү.- Нимә ул сифат? Уның менән яҡынан танышыу өсөн беҙ һеҙҙең менән ҡунаҡҡа барып ҡайтырбыҙ. (Матур өй һүрәте). - Ҡарағыҙ әле, беҙ төрлө-төрлө, матур төҫтәргә буялған өй янына килеп еттек. Ә был өйҙә бына ниндәй матур, бөҙрә сәсле апай йәшәй. Уның исеме – Сифат апай. - Нимә менән шө4өлләнә икән Сифат апай? Уның ҡулдары тылсымлы. Эйе, ысынлап та, ул нимәгә генә тотонмаһын, барыһы ла үҙенсә матурлана, йәнләнә. Бына, мәҫәлән, ағас. Сифат апай ағасҡа ҡулы менән тейеп алған ине, ағасты ниндәйгә әйләндерҙе? + матур, йәшел, бейек, ҡуйы. - Ә был нимә? + бәшмәк. Эйе, беҙ уның ниндәй бәшмәк икәнен белмәйбеҙ. Ә бына Сифат апай уны буяны ла, беҙ хәҙер уны танайбыҙ. Ниндәй ул? + ағыулы, ҡыҙыл. - Был нимә? + еләк . Еләк ниндәйгә әйләнде. + ҡыҙыл, тәмле, етлеккән. - Сифат апай нимәләрҙе матурланы, йәнләндерҙе? + ағасты, бесәйҙе, бәшмәкте, еләкте. + Бер һүҙ менән генә был һүҙҙәрҙе нимә тип әйтергә була? + Исем (предмет) - Нимә ул сифат? - Предметтың билдәһен аңлатҡан һүҙҙәр сифат тип атала. Ул ниндәй? ҡайһы? ҡайҙағы? ҡасанғы? Һорауҙарының береһенә яуап бирә.3. Ҡағиҙәне дәреслектән уҡыу. (6 класс, 104-се бит). 4. Сифаттарҙың телмәрҙәге роле. Сағыштырып уҡыу өсөн ике текст бирелә. Таң ергә нурҙарын һипте Күл өҫтөнән томан күтәрелде. Талдар күлгә баштарын эйҙеләр. Сәскәләр ысыҡта йыуындылар. Таң атты. Көн башланды. Таң ергә алһыу нурҙарын һипте. Күл өҫтөнән ап-аҡ томан күтәрелде. Бөҙрә талдар зәңгәр күлгә баштарын эйҙеләр. Ал, зәңгәр, һары сәскәләр ысыҡта йыуындылар. Алһыу таң атты. Матур көн башланды - Ҡайһы текст һеҙгә нығыраҡ оҡшаны? - Ни

өсөн? - Сифаттар беҙҙең телмәребеҙҙе матурлайҙар, тулыландыралар, йәнләндерәләр. 49-сы күнегеү, 105-се бит. Тексты уҡығыҙ, сифаттарҙы үҙҙәре бәйләнеп килгән исемдәр менән яҙып алығыҙ. 5. Башҡорт телендә род төшөнсәһе юҡлығын асыҡлау. Һүҙбәйләнештәрҙе руссаға тәржемә итеү. Аҡ ҡар – бел й с снег Ҡара ер – черн земля Түңәрәк күл –кругл озеро Рус һәм башҡорт телендәге сифаттар нимә менән айырылалар? - Башҡорт телендәге сифат исем алдында торғанда һис үҙгәрмәй. Исем үҙгәрә, ә сифат үҙгәрмәй. ый ая оеМәҫәлән: ҡыҙыл ҡәләмдәр, ҡыҙыл ҡәләмгә. 50-се күнегеү, 105-се бит. Миҫалдарға ҡарап рус һәм башҡорт телдәрендә сифаттарҙың айырмаһын әйтегеҙ. Голубой цвет - зәңгәр төҫ Голубое небо - зәңгәр күк Голубая лента - зәңгәр таҫма Голубые карандаши - зәңгәр ҡәләмдәр Голубой ленты - зәңгәр таҫманың В голубом небе - зәңгәр күктә. 6. Диалогик телмәрҙе үҫтереү. Урман һүрәте. - Урманда ниндәй ағастар үҫә? - Ниндәй ағастар һәр саҡ йәшел кейемдә? - Ниндәй ҡоштар, йәнлектәр йәшәй? Схема буйынса һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөү. Иң яҡшы тип табылған һөйләмдәрҙе дәфтәргә яҙыу. 7. Тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш т2рби2л21, 28г2м2. Ял минуты. Уҡыусылар, әйбәгеҙ урмандың саф һауаһын һулайыҡ. Һаумы, алтын ҡояшым! (Ҡулдарын өҫкә күтәреп түңәрәк яһайҙар). Һаумы, зәп-зәңгәр күгем! (Ҡулдарын болғайҙар). Һаумы урманым! Иҫәнме һин, елкәйем! Барығыҙҙы сәләмләйем! 8. Бәйләнешле телмәр үҫтереү. Уҡыусылар, беҙҙең Борай районында ниндәй ҙур, матур йылға бар? (Танып йылғаһын һүрәтләгән иллюстрациялар күрһәтеү). - Танып йылғаһы ниндәй урында урынлашҡан? - Ул ҡайҙа ҡоя? - Кемдең Таныпта балыҡ тотҡаны бар?- Йылғабыҙҙа ниндәй балыҡтар үрсей? 9. “Балыҡсы” уйыны. - Уҡыусылар, яр буйында ниндәйҙер балыҡтар ята, уларҙы, мө4айын, браконьерҙар бик бәләкәйҙәр, тип ташлап киткәнд2р6ер. Әйҙәгеҙ, балыҡтарҙы ҡотҡарайыҡ. (Уҡытыусы рәт буйлап йөрөп, “балыҡтарҙы” тарата, уҡыусылар карточкаларҙың артына яҙылған һүҙҙәргә сифаттар уйлап әйтәләр. Айырым һүҙҙәрҙең руссаға тәржемәһе һорала). Көн, ямғыр, алма, тейен, шыршы, ҡар, ат, еләк, ҡош, сәскә, айыу. - Балыҡтарҙы “ҡотҡарҙыҡ”. Тормошта ла, тик яҡшылыҡ ҡына эшләргә тырышығыҙ! 10. Мәҡәлдәр өҫтөндә эшләү. Сифаттарҙы табыу, мәҡәлдәрҙең мәғәнәһен асыҡлау. А) Иң татлы тел-туған тел, Инәм һөйләп торған тел. Б) Тәмле тел балдан татлы. - Донъяла һәр кемгә ҡәҙерлеһе – үҙ туған теле. Үҙ туған теле барҙың үҙ туған рухы бар. Әсә телендә кеше донъяны, донъя матурлығын белә башлай. Уй күрке – тел, тел күрке – һүҙ. Һүҙе яғымлының үҙе лә яғымлы, теле матурҙың күңеле лә матур. Тыуған иле, туған халҡы, туған теле булған кеше мең бәхетле. IV. Өйгә эш. 53-с0 к1негe1. V. Дәрестe йомғаҡлау. Бөгөн дәрестә нимәләр белдегеҙ? VI. Ба3алау. Актив 7атнаш7андар билд2л2н2. Валеологик күнегеү. - Ә хәҙер бер-беребеҙгә ҡарап йы